## 11 октябрь – Башҡортостан Республикаһың тыуған көнө.



**Башҡортостан.**

Ҡырлас тауҙар иле Башҡортостан -
Ата-бабаларҙың баш йорто,
Баш йортҡайын яҡлап яуға сапҡан
Күк Уралдың ҡыйыу башҡорто.
Сал бөркөттар осҡан Башҡортостан
Салауаттай ирҙәр төйәге,
Нисә быуын яугир ҡаһармандар
Россияның булды терәге.
Мең ғазаптар йотҡан Башҡортостан,
Ҡанһырап та баҡҡан ергенәм,
Ни күрһәң дә, ниҙәр кисерһәң дә
Бөгөлмә һин, Тыуған илгенәм!

**Абдулхак Игебаев.**



## Мостай Кәрим.

Пушкины булһа урыҫтың,
Бар **Мостайы** башҡорттоң.
Барлыҡ халыҡ хөрмәт итте
Шиғриәттең Баш ҡортон.

Илебеҙҙә киң танылған башҡорт әҙәбиәтенең күренекле вәкиле, һоҡландырғыс һүҙ оҫталарының береһе булып – Мостай Кәрим тора.

Мостай Кәрим – республикабыҙҙа ғына түгел, төрлө ерҙәрҙә, төрлө халыҡтарҙа ла оло абруй, ҙур ихтирам яулаған халыҡ шағиры.

Әиптең ижады оҙайлы һәм емешле булды. 1935 йылдарҙан алып ул 70 йылдан ашыу ижад итте. Әҙип төрлө жанҙарҙа эшләне: шиғырҙар, пьесалар, хикәйә - повестар яҙҙы. Яҙыусы бик күп илдәрҙә булды, билдәле яҙыусылар менән осрашты. Һәр ерҙә Башҡортостанды данланы. Уны белмәгән кеше бик һирәктер. Яҙыусының әҫәрҙәре асыҡ йөҙлө, ололарға ла, кеселәргә лә ихтирамлы булырға, әҙәбиәтте, туған телде яратырға өйрәтте.

Шағирыбыҙға төрлө милләт ҡәләм оҫталары үҙҙәренең береһенән береһе гүзәлерәк шиғырҙарын арнаған. Уға ҡарата әйтелгән юлдарҙы бергә туплаһаң, үҙе бер китап булыр ине.

Ваҡыт көслө ырыуҙарҙы, илдәрҙе үҙе менән алып китә. Әммә бөйөк шәхестәр, йылдар, быуаттар сылбыры аша үтеп ил улы, ил ҡыҙы булып күңелдәрҙә йәшәй бирәләр. Мостай Кәрим беҙҙең арала булмаһа ла унық китаптары, әҫәрҙәре, унық һәм даны ҡалды. Унық исеме мәңге халыҡ күңелендә йәшәр!

**Ауырғазым!**

Ауырғазым – минең тыуған ерем!
Һиндә тыуҙым, һиндә үҫтем,
Һиндә аяҡҡа баҫтым;
Һиндә уҡып, кеше булып,
Киң донъяға юл астым.
Һиндә күрҙем бар шатлыҡты
Һәм кес кенә ҡайғыны,
Һиндә үтте бала сағым
Бәхет, шатлыҡ юлдарым!

***

**Башҡортостан.**

Күңелемдә булған һөйөү
Сал тауҙар, урмандарға,
Нурлы Башҡортостаныма
Арналған шиғырҙарҙа.
Һәр саҡ уйҙарымда һин,
Алтындай шиғырҙарҙа.
Күҙ яуын алып тораһың,
Ғорур, ғәзиз Ватаным.
Кемдәр генә һоҡланмай һуң,
Һинең тәбиғәтеңә,
Сылтыр көмөш
шишмәкәйҙәй,
Ай кеүек биткәйеңә.
Мәңге балҡы, Башҡортостан!
Һинең менән мин ғорур,
Алыстан уҡ йылмайып тор,
Һин булғас, донъя хозур.

Аяҙғолова Гөлназ

# Теле барҙың – иле бар.

Кешенең бөтә тормошо тел менән бәйләнгән. Тел - кешене ғүмере буйы оҙатып йөрөүсе юлдашы. Тыуғандан алып һуңғы көндәренә тиклем кеше менән бергә йәшәй.Туған тел – кеше тормошоноң бер ваҡытта ла һулымай торған һәм мәңге сәскә атып торған гөлө ул. Әсә телен сылтырап аҡкан шишмә, яҙ көндәре шашып һайраған ҡоштар моңона тиңләп була. Ошо моң балаға әсә ҡарынында уҡ һалына һәм бөтөн булмышына һеңә. Туған тел баланың күңеленә туранан-тура йоғонто яһай, унда кире һәм ыңғай эмоциялар тыуҙыра ,туған телдә әйтелгән һүҙ уны шатландыра, көйөндөрә.

Мәктәптә баланы тәрбиәләүҙә һәм белем биреүҙә туған телдең әһәмиәте ҙур. Дөрөҫ һөйләшергә, уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү менән бергә, халҡыбыҙҙың данлы үткәне, гүзәл йолалары, күренекле кешеләре менән таныштырыу - уҡытыусының изге бурысы.

Лицейҙа башҡорт, татар, рус, сыуаш телдәре туған тел буларак өйрәнелә. Телен, туған илен яратҡан шәхес тәрбиәләү өсөн укытыусылар бар көсөн һала. Яҙыусылар, шағирҙар ижадына арналған әҙәби кисәләр, туған тел аҙналығы, төрлө конкурстар үткәрелә.

Лицейҙа 5-10 октябрь туған телдәр аҙналығы тип иғлан ителде.
Туған телдәр аҙналығы Башҡортостан Республикаһының тыуған көнөнә һәм районДың 85йыллығына арналған тантаналы линейканан башланды. Аҙналыҡтың беренсе көнө – “Әсә теленән иң грамоталы уҡыусы” исемен яулау өсөн көрәш булды. Был көндө юғары класс укыусылары инша яҙҙылар. Республиканың тыуған көнөнә арналған һүрәттәр конкурсында укыусылар әүҙем ҡатнаштылар. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусылары эстәлекле, фәһемле асыҡ дәрестәр күрһәттеләр. Исламғолова Рәйсә Усман ҡыҙы 8 класс укыусылары менән Республика көнө уңайынан дәрес-ярыш , Ғүмәрова Айһылыу Әхәт ҡыҙы 7 класс укыусылары араһында “Мөғжизәләр яланы” үткәрҙе.Уҡыусылар үҙҙәренең белемдәрен “Тапҡырҙар һәм отҡорҙар”конкурсында (Алимбекова Л.Р.), “Мостай Кәрим – ил ағаһы” викторинаһында”(Булатова Г.М) асыҡ күрһәттеләр.Татар халҡының “Ҡунаҡлашыу йолаһы” ( Шаяхметова Г.М.) барыһының күңеленә хуш килде.

Күренекле яҡташыбыҙ Рәшит Назаровтың ижадына арналған “Еремдән көс алып ”әҙәби-музыкаль сараһы уҡыусыларға ла,уҡытыусыларғабик оҡшаны.Уҡыусылар Р.Назаровтың тормош һәм ижад юлы менән таныштылар.

Бындай саралар үткәреүҙең әһәмиәте,әлбиттә, ҙур.Уҡыусылар телебеҙҙең бай ҙа, күпте күргән сәсәндәй йор ҙа, зирәк тә, серле лә фән булыуына төшөнәләр

Рус мөхитендә тыуып, рус мәктәбендә укыһалар ҙа, укыусыларыбыҙ телгә битараф түгел.Әлбиттә,был шатлыҡлы күренеш.

(Булатова Г.М.)





**Йәш хәбәрсе.**

“Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле – минең телем”.
З.Биишева.

№ 2, 4 октябрь 2015 йыл.

